*Мөнир ҠУНАФИН*

# Уҡтар сәпкә тейгән саҡта...

**4-10 сентябрҙә Өфөлә йәйге биатлон буйынса XI донъя чемпионаты үтте**

”Киләһе йыл биатлондың донъяла танылыу алыуына 50 йыл тула. Ләкин ошо осор эсендә беҙ, биатлонсылар, Башҡортостанда яҡшы мәғәнәлә күрмәгәнде күрҙек. Ойоштороу бик-бик юғары кимәлдә, роллерҙар трассаһы донъяла иң шәбе, ә көйәрмәндәр һоҡланғыс! Күпме күңел йылыһы, рух күтәренкелеге алдыҡ беҙ Башҡортостандан. Һеҙҙең алда баш эйәм!” — Өфөлә үткән йәйге биатлон буйынса XI донъя чемпионаты ябыу тантанаһында Халыҡ-ара биатлонсылар союзы вице-президенты, дүрт тапҡыр Олимпиада уйындары чемпионы, ун өс тапҡыр донъя чемпионы, Олимпиада уйындары ордены кавалеры Александр Тихонов шулай тигәйне. Данлыҡлы спортсының был ялҡынлы һүҙҙәрен Башҡортостаныбыҙҙың хәл-торошона, үҫешенә, спортҡа булған ҡарашына оло баһа тип ҡабул итергә кәрәк. Ғөмүмән, чемпионатта ҡатнашыусы һәр кем ҡунаҡсыл һәм бәрәкәтле башҡорт еренә, уның ихлас халҡына һоҡланыуын йәшермәне һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерә белде.



*Дүрт тапкыр Олимпиада уйындары чемпионы, данлыклы биатлонсы Александр Тихонов һәм Башкортостан Республикаһының Премьер-министр урынбаçары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев*

Донъя күләмендәге был оло сараны ни өсөн беҙҙең баш ҡалала үткәрергә хәл ителгән һуң? 21 илдән 200-ҙән ашыу биатлонсыны ҡабул итеүгә һәм спорт бәйгеһен 24 телекамера тура эфирҙа 18 телдә 51 илгә күрһәтеүгә беҙ әҙер инекме? Боҙҙа мотоуҙышта донъя беренселеген, хоккей буйынса үҫмерҙәр араһында Европа чемпионатын үткәреү тәжрибәһе бар ине, әлбиттә. Ә сәнғәт өлкәһендә әҙме халыҡ-ара конкурстар илебеҙҙең мәртәбәһен арттырҙы. Сәнәғәт, иҡтисад, ауыл хужалығы, нефть-газ өлкәһендәге халыҡ-ара күргәҙмәләр,

фән өлкәһендә Европа күләмендә үткән конференциялар Башҡортостанды ысын мәғәнәһендә Рәсәйҙең иң көслө төбәге итеп күрһәтте. Республика бөгөн 90-дан ашыу сит ил менән төрлө өлкәлә хеҙмәттәшлек итә икән, тимәк, Башҡортостан тигән мәмләкәттең абруйы донъя аренаһында бар.


*Ике тапҡыр донъя чемпионы Максим Чудов*

”Башҡортостан һәм уның баш ҡалаһы бөгөн донъя биатлон модаһын булдырыуҙа иң билдәлеләрҙең береһе, — тине чемпионатты асыу тантанаһында Халыҡ-ара биатлонсылар союзы президенты Андерс Бессеберг (Норвегия). — Тамашасыларға мин Өфөнөң күркәм һәм донъя стандарттарына яуап биргән заманса биатлон комплексында һоҡланғыс ярыштар теләйем”.

Башҡорт биатлоны тамырҙары 1958 йылға килеп тоташа. Был спорт төрө буйынса беренсе донъя чемпионаты ла ошо йылда үткәрелеүен иҫәпкә алһаҡ, башҡорт биатлоны донъя биатлоны менән бергә атлай булып сыға. Икенсе йылына, донъя чемпионатында (1959), СССР командаһы составында сығыш яһаған Башҡортостан спортсыһы Дмитрий Соколов команда иҫәбендә донъя чемпионы була, ә VIII Ҡышҡы Олимпиада уйындарында (1960) призлы урындар яулай. Уның был уңышы республикабыҙҙа ошо төрҙө популярлаштырыу өсөн ҙур этәргес бирә. Һәм бөгөнгәсә республикабыҙ йылдан-йыл көслө спортсылар үҫтереп, Рәсәйҙә генә түгел, Норвегия, Германия, Белоруссия кеүек илдәр араһында ла үҙен тиң тоя ала.

Һуңғараҡ Башҡортостан данын Әҙһәм Таһиров донъяға тарата. Ул бер нисә тапҡыр СССР чемпионы булып, 1969 йылда үҫмерҙәр араһында донъя чемпионы исеменә лайыҡ була. Башҡорт биатлонын үҫтереүҙә спорт мастеры, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Памир Ямалеевтың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Ул 2 халыҡ-ара класлы спорт мастеры, 30 спорт мастеры тәрбиәләп үҫтерә, улар араһында Л.Дюпина, А.Сафаров, Ю.Тубакин кеүек СССР һәм Рәсәй беренселеге еңеүселәре бар. Тренерҙың иң оло ғорурлығы һәм ҡаҙанышы — тәрбиәләнеүсеһе Павел Мөслимовтыр. Ул — бер нисә тапҡыр донъя һәм Европа чемпионы, донъя Кубогын һәм Олимпиада уйындарында (1998) бронза миҙал яулаусы.

Шулай уҡ Белорет, Межгорье һәм Ишембай ҡалаларында ла балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәптәре әүҙем эшләп, башҡорт биатлонсыларының матур традицияларын дауам итә. Әйтәйек, Ишембай биатлон мәктәбе үҙе генә лә әллә күпме спорт йондоҙҙарын тәрбиәләп, үҫтереп дан ҡаҙанды. Мәҫәлән, Галина Куклева, был исем күптәргә таныш ҡына түгел, Олимпиада уйындары чемпионкаһы һәм призеры, өс тапҡыр донъя беренселеге еңеүсеһе күп спорт һөйөүселәрҙең кумиры ла. Халыҡ-ара спорт мастеры, донъя һәм Европа призеры Е.Сафарова менән дә



*Үҫмерҙәр араһында ике тапкыр донъя чемпионы Татьяна Зевахина*

ғорурлана ишембайҙар, шулай уҡ ҙур өмөттәр бағлаған йәш спортсы Д.Аҫылғужин, Рәсәй үҫмерҙәр йыйылма командаһы составына инеп, халыҡ-ара ярыштарҙа уңыш ҡаҙанып өлгөрҙө лә инде. Белорет мәктәбендә сынығыу алған, хәҙерге ваҡытта Белоруссия командаһы өсөн сығыш яһаған Н.Сычева ла Олимпиада уйындарында һынатманы.

Ә Чудов, Шульман кеүек биатлонсыларыбыҙ әле данлыҡлы, киләсәктә бөйөк спортсылар исемлегенә инмәксе.

Чемпионаттың Өфөлә үтеү ерлегенең өсөнсө дәлиле — Башҡортостанда спортҡа ҡараштың профессионалдарса булыуында. Әлеге чемпионат тамамланғас, үтә ярһыу бер көйәрмәндең шатланып та, артыҡ дәртләнеп китеп тә: ”Премьер-лигала уйнарҙай бер футбол командаһы булһа, Башҡортостан бөтөнләй спорт иленә әйләнә лә ҡуя”, — тип һөрән һалыуында дөрөҫлөк бар, минеңсә. Ҡышҡы спорт төрҙәренән донъяла иң танылыу тапҡаны хоккей менән биатлон булһа, беҙҙә уларҙың икеһе лә бик үҫешкән. Әйткәндәй, чемпионатта ҡатнашыусылар Өфө боҙ һарайында ”Салауат Юлаев” хоккей командаһының уйынын да ҡарай алды. Чехиянан килгән биатлонсыларҙың үҙҙәренең милли байрағын болғап, ”Салауат Юлаев” өсөн һәм унда уйнаусы ватандаштары-легионерҙар өсөн көйөнөп ултырыуҙарын зал алҡыштар менән ҡаршы алды. Уйын тамамланғас, һөжүмсе Микеска һәм һаҡсы Пхлипп, боҙҙа эстәре менән шыуып (йолаһы шулайҙыр, күрәһең), яҡташтарына рәхмәтен белдерҙе. Рәсәйҙә бик үҫешмәгән бобслей, трамплиндан һикереү кеүек ҡышҡы спорт төрҙәрендә, ғәҙәттә, ҙур ярыштарҙа Рәсәй намыҫын Башҡортостан спортсылары яҡлай. Ә спидвей тураһында әйтәһе лә түгел, шөкөр, алты тапҡыр донъя чемпионы Ғ.Ҡадировтың данын яңыртып тороусылар табылып тора. Йәйгеһен иң популяры — футбол да, еңел атлетика һәм теннис. Һуңғы икеһендә баш әйләнерлек уңыштарыбыҙ етерлек. Лебедева, Шобухова, Хәбирова, Арытҡолов, Черкасов, Дерипаско — был исемдәр еңел һәм ауыр атлетика, теннис тарихында эре хәрефтәр менән яҙылған. Ысынлап та, футбол командаһы булһа, республикабыҙ спорт дәүләтенә әүерелмәҫ тимә. Өфөнөң тағы ла халыҡ-ара шашка ҡалаһы икәнен, Башҡортостан нефтселәренең Рәсәйҙә көслө волейболсы булыуын да өҫтәһәк быға — һөрән һалмаҫ ерҙән, һөрән һалырһың.

”Биатлон” Өфө спорт-һауыҡтырыу комплексы 1986 йылда төҙөлгәйне. 2001 йылғы реконструкциянан һуң унда биатлон буйынса төрлө кимәлдәге ярыштарҙы үткәреү мөмкинлеге тыуҙы. IBU (Халыҡ-ара биатлонсылар союзы) талаптарына ярашлы, спортсылар юғары һөҙөмтәләр күрһәтһен өсөн, барлыҡ шарттар ҙа булдырылырға тейеш. Белгестәр билдәләүенсә, беҙҙең ”Биатлон” комплексы халыҡ-ара бөтә стандарттарға ла яуап бирә. 3,3; 2,5 һәм 2 саҡырымлы трассаларҙа йәйелгән ас-

фальт ҡатламын, кем әйтмешләй, тел менән яларлыҡ. Уның шул тиклем тигеҙ булыуы йәйге биатлон программаһына быйыл беренсе тапҡыр саңғы-роллер, беҙҙеңсә тәгәрмәсле саңғылар, менән ярышыу мөмкинлеге бирҙе. Трассаның ҡайһы бер урында киңлеге 6 метрға етә. Ҡунаҡхана, мәғлүмәт үҙәге, спорт залы, стадион, 3 мең урынлыҡ тамаша залы һәм башҡаһы сара өсөн бөтә уңайлыҡтар тыуҙыра. ”Курвинен” исемле фин фирмаһынан һатып алынған 30 электрон сәп — комплекстың ғорурлығы тип әйтһәң дә була. Ул Рәсәйҙә берҙән-берәү генә. Ҡыҫҡаһы, ун тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр, тиер был тылсымлы спорт батшалығын күргән кеше. Донъя чемпионатын ойоштороу комитеты рәйесе, Башҡортостан Республикаһының Премьер-министр урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишевтың сараны ябыу тантанаһында: ”Йәйге биатлон буйынса чемпионатты тейешле кимәлдә үткәрә алдыҡ, шикелле. Күреүегеҙсә, Өфө — ҡышҡы биатлон буйынса ла донъя чемпионатын үткәреү өсөн бик уңай ҡала”, — тигән һүҙҙәрен зал аяғүрә баҫып ҡаршыланы, тимәк, мөмкинлектәр ҙә бар, халыҡтың ҡышҡы биатлонды күрергә теләге лә ҙур.

Йәйге биатлон. Ҡышҡы биатлон менән сағыштырғанда, был спорт төрө бигүк популяр түгел ине. Был аңлашыла ла, бик йәш бит әле йәйгеһе. Донъя чемпионаты ла ни бары 1996 йылдан бирле генә үткәрелә. Ошо ҡыҫҡа ғына осорҙа ул ярайһы уҡ үҙ итеүселәрен, тамашасыларын тапты. ”Башта әлеге сараға, бәлки, еңелсә ҡарағандарҙыр, — тип һөйләй дүрт тапҡыр Олимпиада уйындары чемпионы Александр Тихонов. — Әммә ҡышҡы биатлонды үҙ иткән кеше йәйгеһенә лә етди ҡарай. Ана, ”Евроспорт” телеканалы Өфөләге чемпионатты биш тиҫтәнән ашыу илдә күрһәтә башлағайны, әллә нисәмә илдән шылтыраталар, имеш, ниңә беҙ саҡырылмаған, имеш, беҙ ундай кимәлдә үтер, тип уйламаныҡ. Беҙ үҙ сиратыбыҙҙа, ғәфү итегеҙ, йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты бара инде, оҙаҡламай ул тарихта сағыу ваҡиға булып ҡаласаҡ, тибеҙ. Әйткәндәй, Африка илдәренең дүртәүһендә ҡатнашырға теләүселәр, ҡыҙыҡһыныусылар табылды. Был бит ҙур ваҡиға. Йәйге биатлондың киләсәге алда әле!” Бөйөк спортсы менән килешмәү мөмкин түгел: был спорт төрөнөң тотороҡло үҫеше хаҡында 2008 йылда Пекинда үтәсәк Йәйге Олимпиада уйындары программаһына йәйге биатлондың да индерелеү факты һөйләй.

”Биатлон” комплексында 5 көн барған йәйге биатлон буйынса XI донъя чемпионатында Рәсәй биатлонсылары бик уңышлы сығыш яһаны: 18 мөмкинлектән 14 алтын миҙал яуланы. Ирҙәр араһында Рәсәйҙең иң көслө биатлонсыһы Өфө районы егете Максим Чудовтың һәм шулай уҡ көслө спортсы яҡташыбыҙ Филипп Шульмандың ҡатнашыуы тамашасылар өсөн оло ваҡиға булды. Егеттәребеҙ спринтта һәм эҙәрлекләү ярышында ҡатнашып, юғары уңыштарға өлгәште. Максим донъяла иң көслө икәнен иҫбатланы — ул ике көндә лә беренселекте бирмәне. Филипп иһә, сәпкә насар атыу сәбәпле, дүртенсе урын менән генә ҡәнәғәтләнде — донъя чемпионатында был насар һөҙөмтә түгел. Үҫмерҙәр араһында яҡташыбыҙ Өфө ҡыҙы Татьяна Зевахинаның да ике тапҡыр донъя чемпионы исеменә лайыҡ булыуы бик һөйөндөрҙө. Киләсәгебеҙ тағы ла йондоҙло мәлдәргә бай буласағы тураһында һөйләй был.